6 класс
08.09.23

Диагностик диктант

I. КӨҘ КҮРЕНЕШТӘРЕ.

Һары ҡанаттарын йәйеп, тағы көҙ килде. Ул нисәнсе көҙҙәр инде, тик уҙған көҙҙәрҙән бер яғы менән дә айырылмай кеүек. Әүәлгесә көндәр йылы, ҡоро тора. Әүәлгесә бульвар, аллеяларға һары, ҡыҙғылт япраҡтар ҡойола тын ғына. Ҡала өҫтөнән ҡыр ҡаҙҙары ла осоп үтте. Улар болон, урмандар шауын, тауҙар йәшеллеген үҙҙәре менән йылы яҡтарға, диңгеҙ буйҙарына алып китте. Күрһәнәп тә ҡуяһың. Ни эшләйһең, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты бар, әммә бойоғорға һис урын юҡ, сөнки тыуасаҡ көндәр менән хыялланып йәшәйһең.

Бына бөгөн дә мәж киләбеҙ, газондарҙағы түтәлдәрҙе ҡаҙыйбыҙ, йомшартабыҙ, ағас ултыртабыҙ. *(Р. Низамов.)*

18-се бит
Дикт. йыйын

6 класс
04.10.23

Өйрәтеү изложениеһы

БАЛЫҠТАР ДОНЪЯҺЫ

Балыҡтар донъяһы үтә лә мауыҡтырғыс. Улар тураһында әллә күпме ҡыҙыҡлы мәғлүмәт билдәле.

Балыҡтарҙың күҙ ҡабаҡтары юҡ. Шуға күрә улар күҙҙәре асыҡ килеш йоҡлайҙар. Ҡолаҡтары ла юҡ.

Иллеләп балыҡ оса белә. Сәғәтенә 60 км тиҙлектә йөҙгән диңгеҙ балыҡтары, һыу өҫтөнә сығып, биш метрға тиклем бейеклектә осоп та баралар.

Ваҡыт-ваҡыт һыуҙан сығып ҡорола йөрөгән балыҡтар ҙа бар. Уларҙың исеме – анабас. Ул һыуһыҙ һигеҙ сәғәткә тиклем ҡорола йөрөүе мөмкин. Ҡорола йөрөргә лә, һыуҙа йөҙөргә лә уға йөҙгөстәр ярҙам итә. Һыуҙан ул аҙыҡ эҙләү өсөн, йә башҡа һыуятҡылығына барыу өсөн сыға. Ҡорола йөрөгәндә хатта ағас башына ла үрмәләп менеп китә.

Бәрҙе балығын халыҡта «батша балығы» тип йөрөтәләр. Тау башҡорттары араһында шундай тарих йәшәй: Рәсәй батшаһы Уралға килгәндә ялан яҡтары уны – бағыр, урман-таулылар бәрҙе менән һыйлаған. Һалҡын һыулы тау йылғаларын ғына төйәк иткән бәрҙе батшаға оҡшап ҡалған. Бынан ары башҡорттарға батша табыны өсөн бәрҙе тоторға тиғән бурыс һалынған.

Балыҡтар тиҙ үрсей. Бер инә балыҡ ҡына меңдән алып 300 меңгә тиклем ыуылдырыҡ сәсеүгә һәләтле. Бер балыҡ үҙенең артынан 10 тоҡом ғына ҡалдыра ала тиғән һүҙ. Ике-өс йылдан һуң был унау үҙҙәре йөҙ тоҡом ҡалдыра. Тимәк, ыуылдырыҡ сәскәндә оҫондай балыҡты тотһағыҙ, һеҙ киләсәктә мең балыҡты юҡҡа сығараһығыҙ. Шулай булғас, балыҡ тотҡанда уларҙың киләсәге тураһында уйлау – бөтә кеше өсөн дә мотлаҡ. *(205 һүҙ)*

Календарҙан

Эш

Балыҡтар тураһында белгәндәрегеҙҙе өҫтәп, изложение яҙығыҙ.